*Әхмәт СӨЛӘЙМӘНОВ*

# ЭЙӘРЕНЕҢ ҠАШЫНА АЛМАС ҠЫЛЫС ТАҒЫЛҒАН

Палеонтология өлкәһендә тикшеренеү алып барыусы ғалимдар раҫлауынса, йылҡы малы үҙенең формалашыу юлында, әҙәм балаһы кеүек үк, төрлө этап үткән. Заманында Азия менән Америка тоташ булған, тиҙәр. Ана шул саҡтарҙа уҡ тәүге аттар Америкала күренә башлаған да шунан башҡа тарафтарға таралған, ти. Тәүге аттар эохиппус йәки хиракотерия (Eohippus, Hyracotherium) тип аталған, сәүек эт бейеклеге генә булып, алғы аяҡтары дүртәр, артҡылағы өсәр бармаҡлы тәпәйгә таянған. Уны кәүҙәгә пони аты самаһындағы, әммә өсәр бармаҡлы аттар (анхитерийҙар — anchierium) алмаштыра. Бынан егерме биш миллион йылдар әүәл улар урынын йомшаҡ табанлы тәпәйҙән арынған, пони самаһындағы ҡаты тояҡлы аттар ала.

Палеонтологтар гиппарион (Hipparion) тип йөрөткән аттар тағы ла камилыраҡ булған: газелдәр һымаҡ нескә тояҡлы булыуҙары уларға ел еткермәй елергә мөмкинлек биргән, ти. Аляска аша Американан Азияға, унан Европаға, Африкаға — бар донъяға таралыуға уның шул етеҙлеге ярҙам иткәндер ҙә инде. Әммә ул хайуандар әле менгегә ярамаған. Бары өҫкө плиоценда ғына (бынан биш миллион йылдар әүәл генә) «бер бармаҡлы» аттар хасил була. Ғалимдарҙың уйынса, тап ана шул мәлдә тарпандарҙың, зебра, ишәктәрҙең ысын шәжәрәһе башлана ла инде.[1]

Тарпандар әүәлге Рәсәй (СССР) биләгән ерҙәрҙә XIX быуат урталарында ла осрағылаған. Уларҙы Урал аръяғы башҡорттары биләмәләрендә күреүселәр ҙә булған. Башҡорттар, ҡырғыҙҙар, ҡаҙаҡтар ул ҡырағай аттарҙы тотоп, ҡулға эйәләштергән. Әлеге ваҡытта тоҙһораған боландар нисек һыйыр көтөүенә инеп тоҙ ялап китә, шуның кеүек улар ҙа ҡулға эйәләштерелгән йылҡыларҙа үҙ ҡәрҙәштәрен танып, өйөрҙәргә килеп ҡушылыуы ихтимал.[2]

Ғалимдарҙың фекеренсә, «таш быуат дәүерендә Европа менән Азияла йылҡы малдарының бер нисә төрө булған. Көнбайыш Европала осрағаны — ялбыр йөнлө, эре һөйәкле, төньяҡ һәм көнсығыш Европала — еңелерәк кәүҙәле тарпандар, Монголияла беҙҙең көндәргәсә ҡырағай хәлдә килеп еткән Пржевальский аттары йәшәгән.[3] Шуға ла көнсығыш Европаға ингән Уралдағы Шүлгән мәмерйәһенең стеналарына тарпан һындарын һүрәтләүҙәре бер ҙә осраҡлы түгел.

Иҫтәлеккә Шүлгән мәмерйәһендә портреттарын ҡалдырған тарпандарҙың замандаштары өйөр-өйөр йылҡы малы барлыҡҡа килеүгә сәбәпсе булған да инде. Беҙҙең эраға тиклем IV меңйыллыҡтар тирәһендә тарпандарҙы ҡулға эйәлештерергә тотонғандар. Шуныһы ғәжәп, ат менән идара итеү ҡулайламаһы булған йүгән бынан биш мең йыл самаһы элек кенә файҙалана башлаған. Ә уға тиклем, хәҙер ишәк менән идара иткәндәге кеүек, таяҡ йә муйынсаҡ файҙаланылған, ти. Атты мәнфәғәтләнә башлаған замандарҙа уҡ йылҡы культы хасил була.[4] «Урал батыр», «Аҡбуҙат» һәм «Заятүләк менән Һыуһылыу» эпостарында йылҡы малының изге зат итеп күрһәтелеүенә һәр саҡ баҫым яһалып булды. Тәүге эҫәрҙә, Аҡбуҙат — күктән төшкән, ҡалған икәүһендә, затлы йылҡы күлдән сыҡҡан мал, тип аңлатылыуына таянды ғалимдар. Был фекер беҙҙә лә бәхәс уятмай, әммә кескенә асыҡлыҡ индереүгә мохтаж. Архаик мифтарҙа «күк йөҙө» менән «донъя дингеҙе» төшөнсәләре араһында айырма юҡ. Шунан сығып хисап иткәндә, «Урал батыр» эпосында Аҡбуҙаттың күктән төшөүе, асылда, уның да һыуҙан сығыуын

аңлата булыр. Икенсе төрлө әйткәндә, «затлы йылҡы күлдән (диңгеҙҙән) сыҡҡан» мотивының инварианты булған да, хәҙер иһә тәүгеһе, тел аҫтына тел йәшереп, икенсеһен күҙ уңында тотоуға тиң.

«Затлы йылҡы күлдән (дингеҙҙән) сығыу мотивы» «Ҡара юрға» ҡобайырында ла (һәр хәлдә, Усман сәсән Сәйетовтан 1960 йылда К.Мәргән яҙып алған версияһында) бар. И.В. Салтыков теркәгән версияла Ҡара юрғаның, эйәһенә кире ҡайтмай, диңгеҙ тарта һыпыртыуы ла бушҡа түгелдер. «Аҡһаҡ ҡола» эпосының Ғабдулла сәсән Агишевтан К.Мәргән яҙып алған версияһында ҡабатланыуға ул ҡабатланмай. Әммә Аҡһаҡ ҡоланың Шүлгән күленән сыҡҡан йылҡы затынан икәненә башта уҡ иғтибар иттерелә: «Булған, ти, бик затлы тоҡомдан бер бейә. Ул Шүлгән күленән сыҡҡан йылҡы нәҫеленән булған, ти». Аҡһаҡ ҡола шул бейәнән тыуа. Шуныһы ҡыҙыҡ. Ул да ер өҫтө донъяһына Шүлгән төбөнән сыға. Сөнки әсәһе «ҡолонлау өсөн, һәр саҡ үҙенең төп төбәгенә (Шүлгәнгә) төшөп» ҡаса икән. Шуның арҡаһында, Аҡһаҡ ҡола ла икеләтә һыу аты (сығышы менән Шүлгән төбөнә бәйле ат) булып сыға.

«Аҡһаҡ ҡола» эпосында шулай уҡ «Ҡара юрға»ның архаик версияларында боронғо йылҡысыларҙың хәҙер инде онотолған бер йолаһы (ысулы), бейәне һыуҙа ҡолонлатыу йолаһы, үҙенсәлекле сағылыуы ла ихтимал. Ни өсөн тигәндә, хәҙерге медицина йәш әсәләргә баланы һыуҙа табыу ысулын тәҡдим итә бит. Шулай иткәндә, бала яҡты донъяға тиҙерәк күнегә. Сөнки инә ҡарынында һыу эсендә ятҡан сабыйға атмосфераға күнегеү еңелдән булмай, тиҙәр.

Ер даръяһы — Донъя диңгеҙе («Заятүләк менән Һыуһылыу» эпосының бер версияһы буйынса ваҡиға диңгеҙ төбөндә була. «Мең дә бер кисә» лә диңгеҙ айғыры Ер бейәһе менән ҡауыша) ни икәнен белгән бабаларыбыҙ өсөн ғәләм дә икһеҙ-сикһеҙ даръя булып тойолған. Мысыр мифында иң юғары илаһ — ҡояш илаһы Ра бушҡа ғына, күк буйлап кәмәлә йөҙә, тип аңлатылмайҙыр. Шуғалыр ҙа инде мифологик эпостарыбыҙҙа затлы аттарыбыҙҙың берәүҙәре — һыу аты, икенселәре (Буҙат менән Һарат) — ғәләм аты. Аҡбуҙат өсөн иһә ғәләм даръяһы ни ҙә, Ер даръяһы ни. «Урал батыр»ҙа күктән төшөүе лә, «Аҡбуҙат» эпосында тура мәғәнәһендә һыуҙан (Шүлгән күленән) сығыуы ла — мәғәнәүи яҡтан бер үк: икеһе лә атты космик зат, изге зат тип таныуҙан килә. Был һығымта Аҡһаҡ ҡолаға ла, Ҡара юрғаға ла, «Заятүләк менән Һыуһылыу» эпосының геройы артынан Асылыкүлдән сыҡҡан йылҡыларға ла ҡағыла.

Кешелектең тормош тәжрибәһе, аңы үҫешә килә, фантастик образлаштырыу күнекмәһенә таянған сүрәттәлә, бабаларыбыҙ билдәле бер дәүерҙә, ерҙәге мөнәсәбәттәрҙе «ерҙәгесә» аңлатыу кимәленә күтәрелгәс, ике ағайҙы (игеҙәктәрҙе) әҙәмсә һүрәтләүгә өҫтөнлөк бирелгәндер ҙә, шул сәбәптән Аҡбуҙат менән Һарат йөҙөндә һүрәтләнгән ике ағай хаҡындағы протосюжет үҫешә алмай ҡалғандыр, үҫешһә, онотолғандыр, тип фараз итергә була. Беҙгә бары шул протосюжеттың килеп еткән бер ярсығы — Етегән һәм Тимер Ҡаҙыҡ тигән йондоҙҙар хаҡындағы этиологик мотив менән генә хушһынырға ҡала.

Эпоста илаһи Күктең «игеҙәк» аттарының береһе генә — Аҡбуҙат ҡына әүҙем. Ул, ергә төшөп, Уралдың, аҙаҡ һәүбәндең иркенә буйһона. Ә Һарат? Уның Ай ҡыҙы Айһылыуҙың аты булыуы ғына мәғлүм. Ваҡиғаларҙа ҡатнашмай. Ни өсөн? Аңлашылмай. Бәлки онотолған протосюжетта ул үҙ функцияһын атҡарып бөтөрөргә өлгөргәндер? Бәлки «игеҙәктәр мифы»ның ерҙә көн итеүсе геройҙарының береһе булған Шүлгәнгә тәғәйенләнгән ат тип ҡаралғандыр ҙа, аҙаҡ сюжеттың был тармағын үҫтереү хәжәте ҡалмағандыр. Юғы — юҡ инде. Булғанына шөкөр итеп, Аҡбуҙат образына килһәк, шуны билдәләргә була: «Урал батыр» эпосында уны Күк аты итеп күрһәтеү — уның үҙен дә, тимәк, киләсәктә унан таралыр башҡорт аттарын да ғәҙәттән тыш илаһи зат тип изгеләштереү маҡсатын сағылдыра.

Ғәләмдең бер өлөшө булған Күк менән Донъя диңгеҙе — мифологияла бер үк төшөнсәләр (Мысыр мифында иң юғары илаһ — Ҡояш, илаһи Ра, бушҡа ғына күк буйлап кәмәлә йөҙә тип аңлатылмайҙыр). Шуға күрә Аҡбуҙаттың «Урал батыр»ҙа күктән төшөүе лә, «Аҡбуҙат» эпосында тура мәғәнәһендә һыуҙан (Шүлгән күленән) сығыуы ла — мәғәнәүи яҡтан бер үк. Икеһе лә атты космик зат, изге зат тип таныуҙан килә.

Йылҡы малына инаныслы мөнәсәбәт Аҡбуҙатты ла, Аҡһаҡ ҡоланы ла,

Ҡара юрғаны ла мал ҡото тип таныуҙа ла, кешесә һөйләшеүсе (антропоморф үҙенсәлекле) зат тип белеүҙә лә сағыла. Мал ҡото булған ат үҙ эйәһенә иш табышып биреүҙә лә хәл иткес роль атҡарыусы зат тип раҫлана эпостарҙа. «Урал батыр»ҙа Һомай был бурысты шулай тип Аҡбуҙаттың хәтеренә төшөрә:

*Батырҙарҙы ырғытып,*
*Мин һайлаған батырҙың*
*Береһен һанға алмаған,*
*Үҙең һайлап батырың*
*Миңә табып бирмәнең.*
*Бына килде батырҙар.*
*Батырлығын һайлапмы,*
*Матурлығын һайлапмы,*
*Береһен үҙең алырһың,*
*Үҙенә юлдаш ҡылырһың, —*
*Һиңә иптәш ир булыр,*
*Миңә һөйгән йәр булыр.*

Тимәк, Аҡбуҙат оҡшатҡан батыр ғына Һомайға тиң була ала.

Ғаилә ҡороуға беренсе булып ҡыҙҙың ынтылыш яһауында матриархат йолаһы сағылыуы мәсьәләһенә туҡталып тормаҫтан, шуны әйтеп үтер кәрәк булыр. Аҡбуҙат: «Матур миңә дан булмаҫ», — тип ҡырт киҫә. Башҡа бәһлеүәндәр, шул иҫәптән Шүлгән ағаһы ла урынынан ҡуҙғата алмаған етмеш батманлыҡ (батман — боронғо ауырлыҡ үлсәме) ташты Урал батыр йоҙроғо менән тәгәрәтә һуғып, урынынан ҡумшытып, иртәнән ҡара кискәсә күктә юғалып тормалы итеп сөйөп ебәреп, төшөп килгәнендә һыңар ҡулы менән генә эләктереп, уны Әзрәкә иленә бырағтырыуы була — Аҡбуҙат уға килеп:

*Мин һинеке, батыр! — тип,*
*Уға буйын биргән, ти.*

Аҡыл эйәләренә генә хас зиһенгә эйә булған аттың матурлыҡтан батырлыҡты өҫтөн ҡуйыуы Һомайҙың да зауҡы шулай икәнен аңғарта.

«Ҡара юрға» эпосында иһә егеттең буй-һыны, көс-ғәйрәте ғәмәлдә һынландырылмай. Хәсән сәсән Буранғолов версияһында ул «батыр» тип кенә нарыҡлана. Ә был һүҙ, башҡорт халҡының эстетик идеалы буйынса, «мәргән», «көслө», «таһыллы», «ҡылыс алышы оҫтаһы», «сәсән», «йырсы» ише төшөнсәләрҙе үҙ эсенә ала. Әбләйҙе батыр тигәндә, шул төшөнсәләр күҙ уңында тотолған эпоста. Һәр хәлдә, егет үҙ бәҫен үҙе белә. Быға беҙ уның:

*Ҡара ҡашлы шул һылыуҙы*
*Алып килсе, юрғам!*
*...............................*
*Нескә билле шул һылыуҙы*
*Алып килсе, юрғам!*
*...............................*
*Зифа буйлы шул һылыуҙы*
*Алып килсе, юрғам!* —

тип, Ҡара юрғаһына иң һылыуҙарҙың да һайлам һылыуын алып килеү бурысын йөкмәтеүенән төшөнәбеҙ. Һәм аҡыллы толпар (И.В.Салтыков версияһын иҫәпкә алмағанда) егеттең һүҙен еренә еткереп үтәй — уны кәләшле итә. (Ә Салтыков версияһында эйәһәнең ҡаты мөғәмәләһенә үс итеп, Ҡара юрға үҙе тапҡан һылыу ҡыҙҙы уға алып бармай, ситкә алып китә: тәүҙә Ирәндеккә алып ҡаса, унан Боҙ дингеҙе аша үтеп, бер утрауға барып төшөп, икәүләп (?) шунда йәшәй башлайҙар).

«Заятүләк менән Һыуһылыу»ҙа һәм «Аҡһаҡ ҡола» эпосында «ат үҙ эйәһенә иш табып бирә» мотивы туранан-тура сағылмай. Был эпоста «ат үҙ эйәһенә иш табып бирә» мотивы, тура һыҡтырмай, уратыңҡырап «эш итә». Әммә «тура һыҡтырылғаны»ның да, уратыңҡырап еткерелгәненең дә асылы бер: ике осраҡта ла егет менән ҡыҙҙың осрашыуына ат сәбәпсе. Дөрөҫ, эске матурлыҡ — рухи камиллыҡ хаҡында эпостарҙа бер һүҙ ҙә әйтелмәй. Сөнки, әҙәби әҫәрҙәрҙән айырмалы рәүештә, фольклор тура һыҡтыра, психологизациялап тормай. Халыҡтың эстетик ҡарашы буйынса, тышҡы матурлыҡ маҡтала икән, рухи камиллыҡ та күҙ урында тотола, тип белгәндәр. Анығы шул: эске матурлыҡҡа эйә булғандарҙың ғына тышҡы камиллығы маҡталған. «Шәүрә килен», «Сәлимәкәй» ише йырҙарҙы ғына иҫкә алғанда ла, быны ысынлап та шулай икәненә инаныу ҡыйын түгел. Әле әйтелгәнде аталған йырҙарҙы анализлау, башҡа миҫалдар менән йөпләргә лә булыр ине. Был тәңгәлдә һүҙҙе оҙайтмаҫтан, ҡыҙ менән ир-егет матурлығы мәсьәләһенә йәнә урап ҡайтайыҡ. Уны күтәреүгә, халыҡтың матур ҡыҙ менән батыр (баһадир) егет тап килеүен, шундайҙарҙың ғына ҡуш булыуын хуш күреүе сәбәпсе булған. Сөнки борон-борондан тормош гармонияһы шунда тип белгәндәр.

Бына шундай талаптарға яуап бирерҙәй ишкә юлыҡтырыусы аттың камиллығы иһә берсә уның һәләтен хәбәр итеү, берсә тышҡы булмышын тасуирлау аша асыла. «Ҡара юрға» һәм «Аҡһаҡ ҡола» эпосында ҡара төҫтәге юрға менән һыңар тояғына аҡһаған

ҡарт айғырҙың барса йылҡы малына баш булырға һәләтле икәне маҡтала. Уларға бер түгел алтмыш өйөр эйәргән. Ул өйөрҙә ниндәй генә мал юҡ!

*Өйөр башы Ҡара юрға*
*Шүлгән күлдән сығып килә,*
*Ҡара юрға артынан*
*Алтмыш алты йылкы килә:*
*Алма-сыбар дүнән килә,*
*Айыл етмәҫ ала ат килә,*
*Ҡойошкан етмәҫ конан килә;*
*Алты колас ала бейә,*
*Ете колас ерән бейә,*
*Сыскан һыртлы кола бейә —*
*Ул да булһа сығып килә;*
*Һандуғас ботло һарат килә.*
*Ялбыр яллы Ҡара юрға*
*Бөтәһен дә алып килә,*
*Бөтәһен дә йыйып килә.*

Аҡбуҙат үҙе менән йылҡы малы матурлығының ике төрөн дә кәүҙәләндерә: ул ифрат һәләтле лә, күрер күҙгә лә күрмәлекле. Тәүгеһе үҙ нәүбәтендә әллә нисә йәһәттән асыла: ул йондоҙ ат, тимәк, яҡтырта ала, күк менән ер араһын осоп үтеү ҡөҙрәтенә эйә (шуғалыр ҙа уны ел дә, дейеү ҙә ҡыуып етә алмай), утта янмай, һыуҙа батмай, бер типһә, Ҡаф тауын он-талҡандай итмәле («Урал батыр»); өйөр башы, мал ҡото («Аҡбуҙат»). Бынан тыш, ул өҫтөндәге батырына аҡыллы кәңәш биреү һәләтенә лә эйә (ике эпоста ла әйтелә был хаҡта). «Урал батыр»ҙа Аҡбуҙаттың тышҡы матурлығы хаҡында һүҙ барғанда, уның тәбиғи камиллығы ла, кеше ҡулы өҫтәгәне лә иҫәпкә алынған:

*Һыртына эйәр һалынған,*
*Эйәренең кашына*
*Алмас кылыс тағылған.*
*Эйәренең кашы алтын,*
*Йүгәненең башы алтын;*
*Ҡолағын беҙҙәй каҙаған,*
*Ялын кыҙҙай тараған,*
*Башкүнәкле танаулы,*
*Һарымһактай аҙаулы;*
*Ҡарсыға түш, тар бөйөр,*
*Еңел, текә тояклы;*
*Ҡуян күҙле,бакыр күҙ,*
*Ҡыҫыр йылан тамаклы;*
*Урайы куш, яңағы ас,*
*Муйындары бер колас,*
*Ҡыйғыр бөркөт кабаклы;*
*Текә баҫып, баш ташлап,*
*Йылғыр атлап, бышкырыр;*
*Ҡолактарын кайсылап,*
*Алпан-толпан караныр;*
*Алғыр бүре күҙендәй,*
*Күҙ бәбәген сылатыр;*
*Ауыҙлык сәйнәп, ярһыуҙан*
*Ауыҙҙарын күпсәйтер;*
*Елһә кошпай елләнеп,*
*Артында саң уйнатыр;*
*Осраған бер кешене*
*Хайран итер, уйлатыр.*
*Бына шундай Акбуҙ ул,*
*Күҙ күрмәгән ят бүҙ ул.*

«Аҡбуҙат» эпосында ла уның тасуирланышы ошолайыраҡ. Тик, әгәр ҙә «Урал батыр»ҙа уға кеше ҡулы өҫтәгән матурлыҡ хаҡында биш кенә юлда әйтелеп, бары эйәренә, йүгәненә, эйәр ҡашындағы алмас ҡылысына һәм ауыҙлығына ғына иғтибар ителһә, «Аҡбуҙат»та уның матурлығының кеше ҡулы тарафынан тыуҙырылғанына өҫтөнлөк бирелгән.

*Яуға сыккан батырҙай,*
*Алтын көмөш эйәрәле,*
*Болғар тартҡы айыллы,*
*Тукымдары ынйылы,*
*Тибенгеһе сәсмәле,*
*Болан тире таралғы;*
*Өҙәнгеһе көмөштән,*
*Эйәр кашы алтындан,*
*Семәрләнгән акыктан;*
*Йылан камсы кашында,*
*Ҡанъяға ла куржыны*
*Ҡырпыуҙары сәхитән,*
*Күмелдерек түшендә.*

«Урал батыр» эпосына ҡарағанда, «Аҡбуҙат»та, толпарҙы тасуирлағанда, кеше ҡулы менән тыуҙырылған матурлығына ныҒыраҡ туҡталыуҙың сәбәбе шуның менән аңлатыла. «Урал батыр»ҙа герой, уның менән осрашҡанғаса, менге малы итеп бала сағында болан, егет ҡорона тулып, геройҙарға хас эштәр атҡара-атҡара сәйәхәт иткәндә елле арыҫлан менеп йөрөй. Ә Аҡбуҙат, Урал батыр уны тәү күргәндә, әле ҡулға эйәләштерелмәгән, менгегә өйрәтелмәгән ат була. Был һығымтаны яһауға шул нигеҙ бирә. «Урал батыр» эпосының И.Рәхмәтуллиндан яҙып алынған версияһы буйынса, Тереһыу шишмәһен юллап китеп барғанда, Уралға тап булған ҡарт: «Улым, бер аҙ барғас, йылҡы өйөрөнә осрарһың. Шул өйөрҙә бер Аҡбуҙ булыр. Булдыра алһаң, шуны менеп ал», — тип кәңәш бирә. Билдәһеҙ бабай әйткән өйөрҙөң эйәһе (йә көтөүсеһе) булыу-булмауы хаҡында бер һүҙ әйтмәй. Ихтимал, ҡырағай йылҡы өйөрө күҙ уңында тотолғандыр.

Шул өйөрҙәге Аҡбуҙатты тасуирлағанда, уның кеше ҡулы менән биҙәлеше хаҡында бөтөнләй әйтмәйсә, улай ғына түгел:

*Башы йүгән күрмәгән,*
*Һыртына эйәр теймәгән, —*

тип, уның ҡулға эйәләштерелмәүенә баҫым яһалып, тәбиғи матурлығы хаҡында ғына һүҙ алып барылыуын шунының менән генә аңлатып була торғандыр.

Һорау тыуырға мөмкин: «Урал батыр» эпосының төп нөсхәһендә Аҡбуҙаттың эйәрле, йүгәнле, ауыҙлыҡлы булыуы, эйәренең ҡашына ҡылыс тағылыуы ниҙе аңлата? Күрәһең, күктән Һомай алдына килеп төшкәс кенә, эйә була Аҡбуҙат уларына. Текстҡа иғтибар итәйек:

*Йондоҙ һымак, атылып,*
*Акбуҙ толпар, атлығып,*
*Күктән килеп төшкән, ти,*
*Һомай һылыу алдына*
*Килеп башын эйгән, ти.*

Ана шул мәлдә уға йүгән кейҙерелә, эйәр һалына, эйәренең ҡашына алмас ҡылыс тағыла, моғайын. Сөнки толпар, Һомай алдына башын эйгәс тә, туҡтап ҡала, йәғни, үҙ-үҙенә менге ат ҡиәфәте бирҙереү өсөн, үҙе үк шарт тыуҙыра.

*Акбуҙ шунда туктаған.*
*Бөтә майҙан һокланған.*

Һоҡланып ҡына ҡалмаған, күрәһең, кем тарафынандыр Аҡбуҙаттың

*Һыртына эйәр һалынған...*
*Эйәренең кашына*
*Алмас кылыс тағылған.*

Артабан: *Эйәренең кашы алтын,*
*Йүгәненең башы алтын, —*

тип эйәр-өпсөнө тасуирлана ғына башлай ҙа, ошо тасуирлама «Аҡбуҙат» тағы һымаҡ йәйелеп китерме, тиһәң, кинәт аттың тәбиғи матурлығы һүрәтләнә башлай. Был да аттың тәүгә менгегә әҙерләнеүенә ишара. Бик күп батырҙарҙы, шул иҫәптән Шүлгәнде лә һынап, Урал батырҙың ғына көсөн танып,

*Буҙ ат, килеп шунан һуң,*
*Уралға баш эйгән, ти:*
*«Мин һинеке, батыр!» — тип,*
*Уға буйын биргән, ти.*

Йәғни уға ғына үҙен менергә рөхсәт иткән. Дөрөҫ, Урал, әкиәт батырҙарынан айырмалы рәүештә, үҙ көсөн ат менән туранан-тура алышыуҙарҙа күрһәтмәй, әммә уның күҙ алдында башҡалар ҡыбырлата ла алмаған етмеш батман ташты иртәнән ҡара кискә тиклем юғалып тормалы итеп күккә сөйөп, төшөп килгәнендә һыңар ҡулы менән генә эләктереп, Әҙрәкәнең батшалығына бырағтырыуы шул алышыуҙан да былайыраҡ әһәмиәткә эйә, тип баһалана. Тимәк, ул асылы менән «батырҙың ат өйрәтеүе (ат буйһондороуы)» мотивына функциональ йәһәттән тиң тип иҫәпләнгән.

«Аҡбуҙат» эпосында иһә Буҙ толпар күптән ҡулға эйәләштерелгән, әммә эйәһен юғалтҡан ат тип танытыла. Шуға ла Шүлгән батшалығына килгән Һәүбәндең:

*Аҫау тотоп өйрәткән*
*Урал батыры Һәүбән мин, —*

тип үҙенең Урал батыр нәҫеленән икәненә ишаралыуы була — «Аҡбуҙат айбанған... Һәүбәнгә килеп башын эйгән, ти», ә инде уға тиклем, батырҙар тураһындағы әкиәттәрҙәге яу аты кеүек, Һәүбәнде күргәс тә, уны сапсырға, тибергә уҡталыуы буласаҡ эйәһен һынап ҡарауы кеүек кенә аңлашыла. Ер ябып торған мал эйәртеп күлдән сығып, кешеләрҙе маллы итеүе лә, Һәүбән йоҡлағанда, ситкә китмәй, көтөп тороуы ла уның хәҙер инде ҡулға ныҡ эйәләшкән мал икәнен аңлата.

Ахырҙа тағы бер сағыштырыу. «Урал батыр» эпосынан Аҡбуҙаттың:

*Күктә тыуып, күктә үҫкән,*
*Ерҙә тоҡом йәймәгән*

мал икәне мәғлүм. Ә «Аҡбуҙат»та, әле генә әйтелгәнсә, ул ер ябып күлдән сыҡҡан малдарға баш, тимәк, түлле мал. Күрәһең, мифик айғырҙың түллелеге лә уны эйәләштерелеүе менән аңлатылған.

Ҡыҫҡаһы, ат йүгәнле, ауыҙлыҡлы, эйәрле икән (эпос уны егеп йөрөүҙе бөтөнләй телгә алмай), тимәк, ул күптән үҙләштерелгән, күптән ҡулға эйәләштерелгән, күптән менгегә өйрәтелгән.

Шуға иғтибар итәйек. Эпос тыуырҙан алда, йыландар, аждаһалар, дейеүҙәр һ.б. менән алышыусы космогоник ҡаһарман — алыптар (титандар) хаҡындағы мифтар һәм легендалар ижад ителгән. Аҙаҡ шулар эпосҡа үтеп инә, йә уға нигеҙ була. Архаик эпос ҡаһарманының дошмандары — мифик, ярым мифик заттар булыуы шунан килә. Ул заттар тора-бара икенсе планға сыға, ә төп ҡаһарман үҙе реаль ҡиәфәт ала башлай. Әммә хәҙер инде эпоста һүҙ уларҙың батырлыҡтары хаҡында ғына бармай, ил-йорт, ғаилә, башҡа ҡәүемдәр менән мөнәсәбәттәргә ҡағылышлы мәсьәләләр киң урын ала. Икенсе төрлө әйткәндә, эпостың йөкмәткеһендә реаль ысынбарлыҡты сағылдырыуға иғтибар көсәйгәндән көсәйә бара һәм мифтан айырмалы рәүештә, эпос баштан уҡ ҡаһарманының башҡа тибын — тәүҙә

мәргән, батыр-һунарсы йә, «Урал батыр»ҙағы кеүек, берәй йәнлекте менеп йөрөүсе баһадир, торараҡ — атлы батыр образын алға сығара.

Ошо күҙлектән ҡарағанда, ҡош ҡиәфәтен алыуға һәләтле ҡыҙҙы (Һомайҙы, Һыуһылыуҙы) кәләш иткәс кенә геройҙың Аҡбуҙатҡа менергә хоҡуҡ алыуы — «Урал батыр» менән «Аҡбуҙат» эпостарында мифологик мотивтарға ғына ҡоролған сюжеттың героик эпос йырҙарына төшөп үҫешә башлауының сиге тип баһаларға мөмкин. Аҡбуҙаттың эйәр-өпсөнөнөң тасуирланышының тулылыҡ кимәле иһә ҡайһы эпоста мифологик, ҡайһыһында донъяуи (реалистик) башланғыс өҫтөнлөк итеүенә ишара ул. Ошо йәһәттән ҡарағанда ла, Аҡбуҙаттың эйәр-өпсөнөн яугир хәжәте кимәленән бөтә тулылығында тасуирлаған «Аҡбуҙат» менән сағыштырғанда, йүгән, ауыҙлыҡ, эйәр һәм алмас ҡылысты ғына телгә алған «Урал батыр» эпосының боронғораҡ, «мифологиғыраҡ» икәненә төшөнөп булыр.

Тарихи яҡтан ҡарағанда иһә мәсьәләгә шундай асыҡлыҡ индерергә булыр. Б.э.т. XVIII быуатта йәшәгән Шумер батшалығы Хаммурапинан ҡалған закондар йыйынтығының 282 пунктының береһендә лә ат телгә алынмай әле. Әммә Е.Гордон тигән ғалимдың 1962 йылда сыҡҡан хеҙмәтенән мәғлүм булыуынса, сама менән 2000 йыл әүәл яҙылған Шумер мәҫәлдәрендә өҫтөндәге һыбайлыны сорғолтҡан ат телгә алынған. Шумерҙа ура династияһынан сыҡҡан һәм тере сағында уҡ илаһилаштырылған Шулга атлы батша шул дәүерҙә йәшәгән.[6] Уның ҡаһарманлыҡтарын данлаған гимнда «Ҡойороғон ялбыратып сабыусы етеҙ ат» телгә алына. [7] Фәндә иһә, кешеләр б.э.т. III-II меңйыллыҡтар араһында ғына атты менеп йөрөргә өйрәнгән, тигән фекер нығынған.[8]

Тимәк, Аҡбуҙат образы ла, Ҡара юрға менән Аҡһаҡ ҡола образы ла шунан «ҡарт» булыуы мөмкин түгел. Әгәр инде йүгән бынан биш мең йыл борон файҙалана башланһа ла, тибенге (шпор) ике мең йыллап, өҙәңге иһә мең ярым йыл әүәл генә, эйәр һәм уның кәрәк-ярағының тағы ла аҙағыраҡ уйлап табылыуын (һәр хәлдә, б.э.т. VIII-VII быуаттар тирәһендә ассирийҙар, скифтар һ.б. эйәр урынына аттың ҡырлы һыртына бәйләнгән үндеккә йә, бот араһы иҙелмәһен өсөн, аттың йоморо янбашына ултырып йөрөгәндәр, ә ҡаты табансалы эйәрҙең тәүге өлгөләре өҙәңге менән йәштәшерәк икәнен[9]) иҫкә алһаҡ, «Урал батыр»ҙың Ғәбидулла Арғынбаев менән Хәмит Әлмөхәмәтовтарҙан теркәлгән версияһындағы һәм «Аҡбуҙат» эпосындағы Аҡбуҙаттың портреты ла, «Ҡара юрға»лағы йылҡы ҡотоноң образы ла тағы күпкә йәшерәк булып сығыр. Шул уҡ ваҡытта аттың тасуирламаһына уның өҫтөндәге ҡулайламалар, биҙәгестәр һуңғыраҡ дәүерҙең өҫтәмәләре булыуы ихтимал икәнен дә оноторға ярамай (сөнки фольклор дәүерҙәр йоғонтоһонан бер ваҡытта ла азат була алмай). Ошо яҡтан ҡарағанда, «Урал батыр» эпосының Исмәғил Рәхмәтуллиндан Әхнәф Харисов яҙып алған версияһында Аҡбуҙаттың һүрәтләнеше күпкә архаик булыуына төшөнәһең. Ни өсөн тигәндә, ул, әйткәнебеҙсә, әле йүгәндең ни икәнен дә белмәгән ат тип таныштырыла:

*Башы йүгән күрмәгән,*
*Һыртына эйәр теймәгән;*
*Ҡолағын беҙҙәй ҡаҙаған,*
*Ялын ҡыҙҙай тараған,*
*Ҡарсығa түш, тар бөйөр,*
*Еңел текә тояҡлы;*
*Һарымһаҡтай аҙаулы;*
*Ҡыҫыр йылан тамаҡлы,*
*Ҡыйғыр-бөркөт ҡабаҡлы.*

Быныһы бер. Икенсенән, Урал батырға Аҡбуҙат, теге версиянан айырмалы рәүештә, үҙе килеп буй биреп тормай. Дөрөҫ, уны ятһынмай, тик тора. Әммә етеҙлек менән һыртына һикереүе була, асыуынан уны «шул тиклем бейеккә сөйөп ебәрә, ти, кем теге, атылып төшөп биленән тиклем ергә батты, ти». «Урал батырға тағы-тағы уны менергә самалап ҡарарға тура килә. Шуныһы иғтибарҙы тарта, йүгәндең ни икәнен Аҡбуҙ ғына түгел, Урал да белмәгән, ахырыһы. Иғтибар итегеҙ: «Ул тағы тырышып-тырышып тора һалды ла йәнә Аҡбуҙға алтланып, уға талпан һымаҡ йәбешеп алды, ти. Аҡбуҙ, күпме тырышмаһын, был юлы өҫтөндәге Уралды осороп төшөрә алманы, ти. Шунан баш тартҡан яҡҡа ҡарап елдерә алып китте, ти». Һуңғы һөйләм — аттың йүгәнһеҙ булыуына айырым-асыҡ баҫым яһау ул. Әммә шуныһы мөһим: эпостың был версияһында атты ҡулға эйәләштереү еңелдән булмауы, тәүге осорҙа был заттың, кеше ихтыярын тыңлауға ҡарағанда, уға үҙ ихтыярын тағыуы үҙенсәлекле итеп художестволы сағылыш